# РАУИЛ БИКБАЕВ. БИОГРАФИЯҺЫН ӨЙРӘНЕҮ.

Эшләне: Баҡалы районы
Яңы Маты төп дөйөм белем биреү
мәктәбенең башҡорт
дәүләт теле уҡытыусыһы
Хәсәнова Шәрифә Памир ҡыҙы

# ЫРЫМБУР



Рауил Бикбаев тыуып –үҫкән Туҡсоран буйындағы Үрге Ҡунаҡбай ауылы ҡыпсаҡ ырыуы нигеҙләгән боронғо ауылдарҙан иҫәпләнә.

# Әҙиптең шәжәрәһе

- Аҫылгәрәй- Бикбай- Ҡотлоәхмәт- Хәсән- Мөхәмәтша- Шәрәфетдин- Төхфәтулла-Рауил

# Өләсәһе

- Өләсәһе Мәүлитбикә - Табылдиндар ҡыҙы – һүрәт төшөрөргә әүәҫ булған
- Ул шулай уҡ сәсән телле зат булған. Ауылдағы төрлө хәлдәр,ҡылымһыр ҡылыҡтар тураһында төртмә таҡмаҡтар сығарырға яратҡан.
- Кесе улы Ғизетдин Алыҫ Көнсығышта һалдат хеҙмәтендә вафат булғас, уға оло бәйет бағышлаған.

# Атаhы



- Төхфәтулла Бикбаев Туҡсоран буйы башҡорто. Йорт hалырға ағасы, яғырға утыны булмаған яландарҙа халыҡ барыбер әмәлен тапҡан, гөрләтеп донъя көтөр өсөн көс-ғәйрәт туплай алған.

# Әсәһе



- Хәлле ғаилә – кулак, тип, Архангель губернаһындағы Котлас лагерҙарында бик күп нужалар күрә. Ыҙа-яфаларға сыҙай алмай, 1936 йылда ауылына ҡасып ҡайта.
- Армиянан ҡайтҡан Төхфәтулла Рәҡиәгә өйләнә, шулай ғына кире һөрөлөүҙән ҡотола

# Бикбаевтар ғаиләһе

- Бикбаевтар бик матур ғаилә ҡоралар. Биш бала үҫтерәләр.1938 йылдың декабрь айында донъяға килгән Рауил шул ишле ғаиләлә, етеш тормош шарттарында иркен үҫә

# Шағир ауыл тураһында



Бала саҡ һәм үҫмер йылдарым күберәк тәбиғәт менән, бигерәк тә һыу буйы, Соран йылғаһы менән бәйләнгән. Даланың иң хәтерҙә ҡалған саҡтарының береһе- яҙ килеүе, үҙәктәрҙең шаулап ярып килеп тҡшҡүҙәре. Сорандың ташыуы, ҡар һыуы ҡойоп, йомран тотоуҙар…

# Белем алыу



- Ғабдрафиҡ-ете йыллыҡ мәктәп
- Аҡбулаҡ педучилищеһы
- Өфө дәүләт университеты

Аҡбулаҡ студенты – 1954 йыл

# Дала офоҡтары (1964)

- Дала улының шиғриәтенә баштан уҡ дала киңлектәре, сикһеҙ офоҡтары эркелеп-тулҡынып килеп инә, күңел ҡылдарын сиртә. Рауил Бикбаевтың шиғри теле «далам, далам» һүҙе, икһеҙ-сикһеҙ дала образы менән асыла

# Ҡош юлы (1967)




- Оло Башҡортостан, Уралтау образдары үҙе йәшәгән ғәзиз ил, урман-таулы, ҙур-ҙур йылғалы, ғәжәйеп бай тәбиғәтле, төрлө милләтле, алсаҡ күңелле уңған халыҡ йәшәгән гүзәл тараф булып һынлана

# Автобиография (1969)

- Ғ. Сәләм премияһы
- Туған халҡының азатлыҡ өсөн көрәшкән атаҡлы Батырша, Юлай Аҙналин, Салауат батыр образдары урын ала.
- Йорт-ер, тыуған яҡ, Башҡортостан, оло Ватан образы менән бергә шағирҙың күңел биографияһының бергә береккән сағылышын күҙәтергә була

# Лирика (1971)



- Лирика- шағирҙың күңел донъяһы көҙгөһө. Лирик герой нигеҙендә Рауил Бикбаевтың үҙ тормош юлына, характерына тығыҙ бәйләнешле кеше, шәхес яҙмышы ята

# Ғүмер уртаһы (1976)



- Көндәремде ваҡлыҡтарҙан әрсеп,
- Һөҙөп ташлап шау-шыу туртаһын,
- Юлдарыма хафа менән бағам
- Еткән саҡта ғүмерем уртаһы…
- Үҙ быуыны-тиҫтерҙәренең уй-тойғолары, заман, кешелек яҙмышы тураһында лирик үткерлек һәм граждандлыҡ пафосы йырлай

# Һөйөнсө (1979)



- -Кеше тыуҙы, һөйөнсө!
- -Тыуыуҙары ни өсөн?
- -Аяғына баҫып илдән
- Алыр өсөн һөйөнсө.
- Был китабында шағирҙың лирикаһы, поэтик биҙәктәре, эске егәре, моңо баҙыҡланып етә

# Ерем балҡышы (1982)

- Уйҙарым, тауҙарҙан ашып,
- Ҡымыҙҙай тора ташып.
- Эш бүлмәм – Башҡортостаным,
- Өҫтәлем- Урал ташы.

- «Ерем балҡышы»-шағирҙың күңел балҡышы ул»- тип яҙа Ғайса Хөсәйенов

# Бураҙналар (1985)



- Тыуған бөртөгөләй кесерәйҙем
- Йондоҙҙарға саҡлы ҙурайҙым,
- Тал сыбығы булып бөгөлөп төштөм,
- Мәғрур имән булып турайҙым.

# Яҙмышым (1988)

- Бөгөнгө көн менән төн шикелле
- Бүленмәгән тигеҙ яҙмышым.
- Үтә көнөм, төнөм хаҡлыҡ тиеп,
- Ғәҙелһеҙлек менән алышып...
- Китаптың исеме үк автор алдында күп, яуаплы бурыстар ҡуя. Шағирҙың яҙмышына ни яҙған икән?

# Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ (1991)




- Һыу буйҙарында һыуға һыуһау-нимә һуң ул?Юғары әхлаҡ сифатарына һыуһау сағыла был
- поэмала

# Барыһы ла беҙҙең намыҫта. Халҡыма хат (1991)

- Башҡорт балаһы мин, Ер хәтерендә
  Меň йыл уйылып ҡалған эҙем бар.
  Быуындарға ялғап быуындарҙы,
  Илде тотҡан телем, һүҙем бар.
- Шул тел менән халҡым хаҡ яҙмышын
  Ҡайһы быуаттарға яҙмаған.
  Күпме аҫыл ерҙәренән яҙған,
  Күпме аҫыл ирҙәренән яҙған,
  Күпме аҫыл йырҙарынан яҙған,
  Тик моңонан, теленән яҙмаған

# Яңғыҙ ҡоштоң осоп барғаны (2003)

- Ниндәй заман!
- Ҡуҙғалды бар илдәр...
- Һәр хәбәрҙе  тертләй-тертләй көтәм.
- Иҫкән ел дә гүйә уйҙарыма,
- Юлдарыма мина һалып китә.

- Ил өҫтөнә килгән ауырлыҡтар һәм ҡаршылыҡтар хаҡында борсола, тынғы бирмәй әҙипкә

# Йөҙ ҙә бер хәҙис (2001-2003)

- Кешелектең төп ҡиммәте иман, тигән,
- Имандың һәр тармағына инан, тигән,
- Иман нурын һанлаусының
- Хикмәт тулы һүҙҙәренә
- Һис шикләнмәй инан, тигән.
- “Хәҙистәр үҙҙәренең кешелеклегe, тәрән фәлсәфәһе, тапҡыр теле менән мине ғүмерлеккә арбаны», тип яҙа Рауил Бикбаев

# Башҡортостан Республикаһының Дәүләт гимны (2008)

- Башҡортостан, һин һөйөклө ғәзиз ер,
- Халҡыбыҙҙың изге Ватаны.
- Сал Уралдан ҡалҡа бар тарафҡа
- Тыуған илдең тыныс ар таңы.
  - Дан һиңә, Башҡортостан!
  - Илен һөйгән азат халҡына дан!
  - Рәсәй менән бөйөк берҙәмлектә
  - Сәскә ат, Башҡортостан!
- (Р. Бикбаев менән Р. Шәкүр һүҙҙәре)

Мин күптән инде көндәлектәр яҙам. Ҡырҡ йылдан ашыу ваҡыт эсендә күргәндәрем-кисергәндәрем теркәлеп барған дәфтәрҙәрем хәҙер бер нисә китап булырлыҡ. Тормошом сәхифәләре тәүге осорҙа онотҡанда бер тигәндәй ҡағыҙ битенә төшһә, ғүмер үткән һайын уларға йышыраҡ иғтибар иттем. Көндәлектәр асылда минең ижадымдың үҙенсә бер мөһим өлөшөнә әйләнде. (Р. Бикбаев)



# Халҡыма бер һүҙ



- Рауиль Бикбай
- 22 февраля 2013 в 8:19
- Мин аҡһаҡты бар яһаным —
Аяҡлыға булһын һабаҡ.
Мин сулаҡты бар яһаным —
Зарланмаһын ҡуллы ҡабат.
Мин күҙһеҙҙе бирҙем ергә —
Күҙ ҡәҙерен белһен күҙле.
Мин телһеҙҙе бирҙем ергә —
Һүҙ ҡәҙерен белһен һүҙле.
Бәндәләрҙән ҡаҙытамын
Мәңгелек йорт — гүр-ҡәберҙе.
Бәлки, шул саҡ ҡәҙерләрҙәр
Нур ғүмерҙе, ғәзиз ерҙе.

# Ҡулланылған әҙәбиәт


- Башҡортостан: Ҡыҫҡаса энциклопедия. Урыҫсанан тулыландырылған һәм төҙәтелгән тәржемәһе / Баш мөхәррир Р.З.Шәкүров. Өфө: Башҡорт энциклопедияһы дәүләт ғилми нәшриәте, 1997. 696 бит, һүрәттәре менән.
- Рауил Бикбаев. Яңғыҙ ҡоштоң осоп барғаны /Шиғырҙар.
- Рауил Бикбаев: " Халҡым яңылышмаһын ине"
- 1967 йыл: Ҡош юлы: Шиғырҙар, поэмалар. Өфө, 1967. 1976 йыл: Ғүмер уртаһы: Шиғырҙар, поэмалар. Өфө, 1976. 1985 йыл: Бураҙналар: Шиғырҙар, поэмалар. Өфө, 1985.
- Ғ. Хөсәйенов. Рауил Бикбаев. Тормошо һәм ижады. Өфө-2008
- Берйән Байым. Ижадсылар. Өфө-2008
- bashkir.jimdo.com ›башҡорт-әҙәбиәте/
- bash-portal.ru
- uldashfm.ru
- vk.com › rbikbai
- agidel-rb.ru